***Һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға, тиң киҫәктәрҙе билдәләргә.***

Урал тауҙарында нефть, газ, алтын, көмөш, баҡыр, тимер сыға.

Нефть менән газ Өфөлә, Ишембайҙа, Салауатта, Октябрьскиҙа, Нефтекамала, Туймазыла эшкәртелә.

Аҡ, ҡыҙыл, ал, һап-һары, зәңгәр сәскәләр бар Башҡортостанда.

Борон башҡорт атҡа бик йәштән атланған, ярты ғүмерен ат өҫтөндә үткәргән.

Ерҙе ҡаплаған үләндәр һәм сәскәләр, күккә һуҙылған төҙ ҡарағайҙар, сибәр аҡ ҡайындар, бал еҫле йүкәләр, муйылдар  ирәйеп ултыралар.

Класыбыҙҙа егәрле, уңған, тырыш, алдынғы уҡыусылар уҡый.

Беҙ уңыш байрамында йырланыҡ, һөнәрҙәребеҙҙе күрһәттек, бейенек.

Миңә уҡытыусылар башҡорт теленән, рус теленән, математиканан дәрес әҙерләргә ҡуштылар.